

# ЙЫР-МОҢҒА БАЙ ЯКТАШЫБЫҘ

Тыуған йортонда бала ни күреп үҫһә, тормошонда ла шуны ҡабатлай, тиҙәр. Районыбыҙҙың Иҫтамғол ауылында йәшәгән Хәкимйән ағай күңелсәк кеше ине. Мандолинаға тотонһа, йөрәгеңә ятырлыҡ итеп сиртә уны. Улы Рәмилдең дә музыкант булыуы тураһында хыяллана. Атаһының өмөттәрен аҡларға теләгәндәй, һәләтле малай өсөнсө синыфта уҡыған сағынан уҡ ауыл клубында сығыш яһап үҫә. Мандолинала, гармунда, һуңыраҡ баянда ла уйнарға өйрәнә.

1971 йылда Рәмил Өфө сәнғәт училищеһының вокал бүлегенә уҡырға инә. Уны тамамлағас, Комсомольск, район мәҙәниәт йорттарында директор булып эшләй. Ситтән тороп уҡып Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлай.

Рәмил Ғимранов бөгөн танылған композитор. Ул ижад иткән көйҙәр халыҡ күңеленә ятышлы. Һәүәҫкәр йырсылар ҙа, билдәле артистар ҙа уның йырҙарын кинәнеп башҡара. Республикабыҙ телевидениеһы, радиоһы ла композиторҙың ижадына йыш мөрәжәғәт итә. Башҡортостан «Китап» нәшерәтендә талантлы яҡташыбыҙҙың «Мин йәшәйем яратып» исемле йыйынтығы донъя күрергә тейеш. Унда авторҙың 60-лап әҫәре ингән.

Йырсы булараҡ, Рәмил Ғимранов үҙешмәкәр йәш йырсыларҙың Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге республика конкурсы, I, II, III Бөтә Союз үҙешмәкәр йырсылар конкурстары лауреаты исемдәрен яуланы, Башҡортостан үҙешмәкәр композиторҙары бәйгеһендә еңеүгә өлгәште.

Әле Рәмил Ғимранов Учалы музыка училищеһында йыр, фольклор дәрестәрен алып бара. Учалы балалыҡ йортонда музыка етәксеһе булып эшләй. Тормош юлдашы Мөнәүәрә ханым менән ике ул һәм һөйкөмлө ҡыҙҙарын тәрбиәләйҙәр. Зөлхизә урта мәктәптең өсөнсө, музыка мәктәбенең икенсе синыфында уҡып йөрөй. Улдары Шатморат Башҡорт дәүләт университетында уҡый, Рөстәм Йылайыр ауыл хужалығы техникумын тамамлай. Икеһе лә йырсы, ҡурайсы. Шатмораттың үҙе ижад иткән бер тиҫтә самаһы көйҙәре лә бар.

Талиптарына, ғаиләһенә, яҡташтарына, халҡына йөрәк моңон бөркөп йәшәй ул Рәмил Ғимранов.

*Ә. БАЙРАМҒОЛОВ*